РАҪЛАЙЫМ:
Башҡортостан Республикаһы
Хәйбулла районы муниципаль районы
үҙәкләштерелгән китапханалар системаһы
муниципаль автоном учреждениеһы
директоры: ________А.Х. Сынбулатова

**«РУХ ЯҘЫУЫ» асыҡ район шиғри-телевизион конкурсы (бәйге) үткәреү тураһында**

# ПОЛОЖЕНИЕ

## I.Бәйгене ойоштороусылар

Башҡортостан Республикаһы Хәйбулла районы муниципаль районы үҙәкләштерелгән китапханалар системаһы муниципаль автоном учреждениеһы

Башҡортостан Республикаһының мәҙәниәт министрлығы Башҡортостан Республикаһы муниципаль районының Хәйбулла районы «Мәҙәниәт идаралығы» муниципаль ҡаҙна учреждениеһы район мәҙәниәт йортоноң киновидеопрокат һәм телерадиотапшырыуҙар студияһы муниципаль ҡаҙна мәҙәниәт учреждениеһы

## II.Бәйгенең маҡсаты һәм бурыстары

1. Бәйге күренекле яҡташыбыҙ, шағирә, Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре, Салауат Юлаев ордены кавалеры Йомабикә Сәләхетдин ҡыҙы Ильясованың ижадына арнала.

2. Шағирәнең ижадына ҡарата ҡыҙыҡһыныу уятыу, уны пропагандалау.

3. Уның шиғырҙары аша телебеҙҙе ҡәҙерләргә, уның бөгөнгөһөн, киләсәген хәстәрләргә өйрәнеү;

4. Йәш быуында илһөйәрлек, телһөйәрлек тойғолары уятыу һәм тәрбиәләү;

5. Милли рух, тоғролоҡ, кешелеклелек сифаттарын үҫтереү.

## III.Бәйгенең дөйөм шарттары

1. Бәйгелә 16 йәш һәм унан өлкән теләгән кеше ҡатнаша ала. Үткән бәйгеләрҙә Гран-при яулаусыларҙың ҡатнашыу хоҡуғы юҡ. Заявка тултырыу мотлаҡ.

*(Ҡушымта).*

2. Бәйге III турҙа ойошторола.

**I тур**

2.1. I турҙа ҡатнашыусыларҙан видеотаҫмалар ҡабул ителә.

2.2. Видеотаҫмала ҡатнашыусы Йомабикә Ильясованың шиғырҙарын яттан тасуири уҡырға тейеш. Баһалағанда шиғырҙың көсөн һәм мәғәнәһен тулы килеш биреү һәләтенә өҫтөнлөк биреләсәк.

2.3. Музыкаль яҡтан биҙәү хуплана.

2.4. Видеотаҫманың күләме 7 минуттан артмаҫҡа тейеш.

2.5. Видеотаҫма һәм заявканы krcbs2016@mail.ru электрон почтаһына ебәрергә була.

2.6. Бәйге эштәре https://vk.com/public164236659 (башҡарыусы тураһында ҡыҫҡаса мәғлүмәттәр: исем-шәрифе, йәшәү урыны...) «Бәйләнештә» социаль селтәрендәге «РУХ ЯҘЫУЫ» махсус төркөмөнә һалына.

**II тур.**

3. Баһалама ағзалары тарафынан иң яҡшы 20 видеотаҫма II турға һайлап алына. Уларҙың сығыштары Аҡъяр телевидениеһы аша күрһәтеләсәк.

3.1. «РУХ ЯҘЫУЫ» асыҡ район шиғри-телевизион конкурсы (бәйге) финалы 2023 йылдың апрель айында район мәҙәниәт йортонда үтәсәк.

**III тур финал**

4. Финал ике бүлектән тора.

4.1. Беренсе бүлектә бәйгеселәр Йомабикә Ильясованың ижады аша «Мин һәм минең тыуған ерем» тигән темаға сығыш яһап, тыуған еренә, йәнтөйәгенә ҡарата үҙ мөнәсәбәтен, һөйөүен, мөхәббәтен һәм илһөйәрлек сифаттарын белдерә. Слайд-презентация, йыр, театраллаштырылған тамаша хуплана.

4.2. Икенсе бүлектә сығыш яһаусы Йомабикә Ильясованың төрлө темаға арналған бер шиғырын һөйләй.

4.3. Беренсе һәм икенсе бүлектең шарттарын бәйгесе сәхнәгә бер сығыуҙа башҡара.

## IV. Еңеүселәрҙе баһалау һәм бүләкләү

1. «ТЕЛ ОҪТАҺЫ-2023» дипломы (Гран-при),
2. I урын дипломы,
3. II урын дипломы,
4. III урын дипломы,
5. Хәйбулла районы башҡорттар Ҡоролтайының махсус дипломы.

Сығыш яһаусыларҙың бөтәһенә лә ҡатнашыусы дипломы һәм иҫтәлекле бүләктәр тапшырыла. Шулай уҡ, сараны баһалаусылар махсус номинациялар булдырыу хоҡуғына эйә. Баһалама ағзаларының ҡарары ҡайтанан ҡаралмай.

## V. Жюри ағзалары

1. Әхмәр Ғүмәр улы Үтәбаев, яҙыусыһы, шағир, журналист, Башҡортостан Яҙыусылар союзы ағзаһы, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре;

2. Мәмбәтова Лариса Рәшит ҡыҙы, район мәҙәниәт идаралығы начальнигы, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре;

3. Бохарбаева Менәүәрә Исхаҡ ҡыҙы, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы, мәғариф хеҙмәте ветераны;

4. Түләбаева Рәйфә Искәндәр ҡыҙы, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы, РФ-ның почетлы дөйөм белем биреү хеҙмәткәре;

5. Ишемғолова Миңзифа Ибраһим ҡыҙы, район мәҙәниәт йортоноң халыҡ ижады буйынса методисы, район «Ағинәйҙәр» ойошмаһы етәксеһе.

## VI. Белешмә һәм мәғлүмәт сығанаҡтары

1.Аҡъяр ауылы, М. Гәрәев – 40 урамы, үҙәк район китапханаһының башҡорт әҙәбиәте һәм тыуған яҡты өйрәнеү бүлеге, e-mail: krcbs2016@mail.ru , Бәйләнештә https://vk.com/public164236659 телефон: 89373302403.

2.Аҡъяр ауылы, М. Гәрәев – 40 урамы, үҙәк район китапханаһы (методик-библиография бүлеге), телефон: 2-16-79, e- mail: mukcbs50@mail.ru

*(Ҡушымта)*

**«РУХ ЯҘЫУЫ» бәйгеһенә заявка**

| Сығыш яһаусының исем-шәрифе | Йәшәгән урыны | Йәше | Эшләгән йәки уҡыған урыны | Шиғырҙың исеме | Телефоны |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | | | |
| | | | | | |
| | | | | | |
| | | | | | |